# ПЛЕМЯ МЛАДОЕ, ЖЕСТОКОЕ

ЧИТАТЕЛЬСКАЯ КОНФЕРЕНЦИЯ ПО КНИГЕ АМИРА АМИНЕВА «КИТАЙ – ГОРОД»



**АМИР МУХАМЕТОВИЧ АМИНЕВ**

Амир Аминев родился 1 января 1953 года в деревне Сабаево Гафурийского района Башкортостана. Окончил Литературный институт имени Горького. С 2002 года главный редактор журнала «Агидель».

Автор нескольких книг на башкирском языке («Мелодии молодости», «Тысяча и одно мучение», «Водоворот», «Ворота» и др.). Член Союза писателей РБ и РФ. Заслуженный работник культуры Башкортостана.



Однокурсники: Амир Аминев и Юрий Андрианов




**Автор книги удостоен Большой литературной премии в 2012 году.**


«Ваҡыт миңә
йүгәнһеҙ тай булды...»


Әмир Әминев
Ҡәләмдәштәргә
һүҙ

Гөлнур ЯҠУПОВА

# ИЛҺӨЙӘРЛЕК РУХЫ

*(Әмир Әминевтың «Ҡапҡа» китабына бер ҡараш)*

«Стиль — кешенең үҙе ул». Был фекер әҙәби тәнҡиттә XVIII быуаттан бирле йәшәй һәм бөгөн дә өр-яңы. Эйе, яҙыусылыҡҡа, һәр башҡа һөнәргә эйә булған кеүек, ниндәйҙер кимәлдә өйрәнергә, таһылланырға булалыр. Әммә стиль һөнәр ҙә, тырышып ҡына үҙләштерә алырлыҡ ғилем дә түгел. Ул гүйә кешенең шәхсән бер сифаты, ябайлаштырып әйтеп ҡарағанда — күҙенең төҫө, бармаҡ битендәге һыҙыҡтары һымаҡ. Айырма шунда: ижад стиле яҙыусыға тыумыштан бирелмәй, ул уны үҙ ихтыяры менән таҡыр юлдан яҙлығып, мең михнәттәр аша яңы һуҡмаҡ ярған сәйер юлаусылай, эҙләп табырға тейеш. Юғиһә күрмәйәсәктәр, хатта һәр йәһәттән камил әҫәр ижад иткәндә лә аптырамаясаҡтар.

Әлбиттә, иҫ китмәле сюжет ҡороп та иғтибарҙы йәлеп итергә була. Ләкин был үтә лә ауыр мәсьәлә: кәм тигәндә «Дон Кихот» рәтендәге әйбер кәрәк! Ғәмәлдә бит дүрт йүнәлештә генә үрелә сюжет та, һәм ул авторҙың үҙ-үҙенә, кешелек донъяһына, башҡа енес эйәһенә (яҙыусы ир заты икән — ҡатын-ҡыҙға, һәм киреһенсә), йыһанға ҡарата фәлсәфәүи мөнәсәбәтенән ғибәрәт була. Йәғни ошо шарттарҙа, донъя әҙәбиәте бөгөнгө уҡыусыға ифрат бай мираҫ тәҡдим иткәндә, ижад көмбәҙендә береһенән-береһе яҡтыраҡ йөҙәрләгән йондоҙҙар балҡығанда, исемеңде таныттырыу, үҙ стилеңде тойомлатыу, һайлап алыу өсөн яҙыусы шәхесендә бер ыңғай әллә күпме сифаттарҙың тап килеүе кәрәк.

Әмир Әминевтың «Ҡапҡа»һы мине бына ниндәй уйҙарға юлыҡтырҙы. Ихлас ҡыуандым ҡәләмдәшем өсөн: үҙ стилен тағы ла ныҡышмалыраҡ иҫбатлаған, ҡәләме үткерләнгән, шымарған. Үрҙә телгә алынған «сифаттар»ҙа баҙыҡланған. Атап әйткәндә, ижадсы өсөн уларҙың иң заруры — талант — ҙур һүҙ, әммә уны әҙип тәңгәлендә әйтеү бик тә урынлы. Ә инде таланты эргәһенә иш янына ҡуш булып егәрлелек, сәм, тәжрибә һәм, әлбиттә, белем, мәғлүмәтле аң, зиһен сослоғо ла өҫтәлһә — был яҙыусыла өмөт бар.

һайлап, һайланып уҡый бөгөнгөләр. Беләм, Әмир Әминевты уҡыйҙар. Күптәр уны «Бүре балалары», «Ҡар кешеһе» исемле хикәйәләренән һуң танып алды һәм шунан бирле онотмай, күҙәтә, көтә. Яҙыусы был популярлыҡты үҙ стиленә тоғролоғо менән яуланы, тиһәм, һис тә яҙа китмәҫ. Шуныһы ҡыҙыҡлы, әҙип ижадының башында уҡ зауыҡлы, аңлы уҡыусыны күҙ уңында тотоп яҙҙы. Уның хикәйәләре нимәләр хаҡында бәйән итеүгә генә ҡоролмаған, ә кешене уйланырға, тормош фәлсәфәһен аңларға, үҙ асылына бағырға ла мәжбүр итә — өндәмәһеҙ, нотоҡһоҙ, бары тик нәфис һүҙ көсө менән, фекер ҡеүәһе менән. Еңел-елпе сюжет, әүрәткес порнография артынан эйәреү, яһалма рәүештә ябайлаштырыу, урта ҡул уҡыусы ихтыяжы кимәленә яраҡлашыу урап үтте Әмир Әминевты, ул нәфис әҙәбиәтте лә үҙ түмәренә һалып сапҡылаған «баҙар балтаһы»нан ҡурҡманы, юғары талапҡа, элитарлыҡҡа дәғүә иткән әҫәрҙәр ижад итте. Әммә уҡыусы менән «уйнаманы» ла, уның алдында рухи аристократ, көйәҙ эстет йәки башҡаларҙы ҡара һарыҡҡа һанаған аҡыллы баш булып та ҡыланманы.

Китап «Ҡытайгород» тигән повесть менән башлана. Сәйер исем. Ят, әүрәткес. Хәтерҙә нимәләр ҡуҙғалып ҡуя, йүгерек уй әллә ҡайҙарға, Ҡытай яҡтарына бара һалып урай. Уҡығы килә, фантазияң ирекһеҙҙән төрлө версиялар ҡора башлай…

«Ҡытайгород»тың эсенә инеп китәм һәм персонаждар менән йәнәш автор үҙе лә пәйҙә була: Әмир Әминев донъяға оло ҡапҡа асып сыға ла һынсыл ҡарашы менән илдең көнөн, киләсәген байҡай. Күрәҙәсеме ул? Юҡ. Батшамы? Юҡ. Кем һуң? Илһөйәр. Һәм уның ҡулында иң ҡеүәтле, мәңгелек ҡоралдарҙың береһе — һүҙ. Шул ҡорал менән ул күңел күҙе күргән, зиһене һайлап алған күренештәрҙе тергеҙә. Бер рәссам да тотош ғәм күҙе менән ҡарамай, коллектив аң менән ҡабул итмәй донъяны, әммә ул шул халыҡҡа атап ижад итә һәм инана: кемдер ерҙә үҫкән сәскәне күреп һоҡлана, ә кемдер — һауалағы ҡошто. Тотошлай әҫәрҙе, уның һәр детален, һәр өтөр-нөктәһен аңғарыусы һирәктер, бәлки, юҡтыр ҙа. Ошоно яҡшы аңлап эш итә кеүек Әмир Әминев. Иң мөһим тип иҫәпләгән урындарҙа логик баҫым яһау, әҙ һүҙ менән ҙур мәғәнә биреү хаҡында онотмай ул. Артыҡ эпитеттар менән сыбарламай әҫәрҙәрен, ҡырҡмаһа ҡырҡ персонаж килтереп ҡыҫтырып уҡыусыны аҙаштырмай.

…Мин — уҡыусы, илһөйәр Әминев артынан эйәреп, гүйә ҡылдан нәҙек, ҡылыстан үткер күпер аша сығып барам. Ышанам да, ышанмайым да. Үҙем яҙыусы фантазияһы тыуҙырған «Ҡытайгород»та йөрөйөм, үҙем ысынбарлыҡтың ҡайнар тынын тоям: әгәр беҙ илһөйәр иҫкәрткәнгә илтифат бирмәһәк, әҫәрҙәге Һыбай ауылы кешеләре яҙмышына дусар буласаҡбыҙ.

Әллә совет заманында, Мәскәүҙә Әҙәбиәт институтында уҡыған Әмир Әминев социалистик реализм ысулы менән яҙамы? Әҙәбиәттең юлы сәйәсәт менән киҫешмәй ҙә булмай ҙаһа, заманға ауаздашлыҡ тигән төшөнсә лә бар… «Ҡытайгород»ты мин социаль реализм тип ҡабул

# УЙҒА ҺАЛЫР ЯҘМЫШТАР

*Әмир Әминевтың яңы йыйынтығын* уның ижадын яҡындан белеүселәр, моғайын да, эске бер тулҡынланыу менән ҡулға алғандыр. Сөнки ул маһир хикәйәселәребеҙ араһында төпсөрлө уйлап, әҫәрҙәренә тәрән мәғәнә, донъяуи фәлсәфә һалып ижад итеүе менән танылды. Һәр хәлдә "Йәшлек моңдары" (1989) китабы был фекерҙе ныҡыта ғына төштө. Яңы тупланма уны, башҡорт әҙәбиәтенең сәсмә өлгөләре тиған йөгөн төпкә егелеп, өсөнсө меңйыллыҡҡа илтеүсе әҙиптәр ҡатарына баҫтыра.*

*Шуныһына иғтибар итә ҡуйҙым: "Йәшлек моңдары"н сыңлатҡандан һуң 12 йыл ғүмер үтеп тә киткән бит. Тулы бер мөсәл! Әмирҙең үҙ-үҙенә һуң дәрәжәлә талапсан, йылына бер, әммә берәгәйле хикәйә ижад итеүе билдәле инде ул. Шулай ҙа...*

*Хикәйә — художестволы прозала иң күндәм, иң хәрәкәтсән жанр. Бөгөнгө көн проблемалары хаҡында образлы дөйөмләштерелгән фекерҙе иң тәүҙә ул еткерә. Бына шунан һығымта яһа инде: бынамын тигән хикәйәсе лә 12 йылға саҡ бер йыйынтыҡ сығара алһынсы әле! Нәшриәт эштәре хаҡында уйланмаҫ ерҙән уйланырһың. Әйтерҙәр: матди хәлебеҙ ташҡа үлсәйем, фәләнфәсмәтән... Быныһы ла хаҡ. Тик йүнсел әҙәм йүнен күргәндә, булдыҡһыҙы һыныҡҡа һылтау эҙләй. Ҡыҫҡаһы, нәшриәт эштәренә ентекле иғтибар итәһе бар, ағай-эне.*

Ҡәләм алыуға сәбәпсе йыйынтыҡҡа алты хикәйә, бер документаль повесть индерелгән. Һәр ҡайһыһында үҙенсәлеккә эйә фәһемле кеше яҙмыштары. Ләкин уларҙы бергә уҡмаштырыр уртаҡлыҡ та бар. Ғүмер тигәнең һәр кем өсөн бер генә, берәү генә. Ниҙә һуң ошо берҙән-бер ғүмеркәйҙәрҙең мәғәнәһе!? Уйланамы беҙҙең күптәребеҙ ошо турала? Әмир Әминев геройҙары иһә ғүмерҙәренең боролошло мәлендә ошондай һорау алдында күҙмә-күҙ ҡала. Һорауҙан яҙлығырлыҡ түгел, сөнки уны үҙ намыҫың ҡуҙғата. Ҡасып ҡотолормон йәиһә йәшенеп ҡалырмын тимә. (Ул намыҫ тигәнеңде ете йоҙаҡҡа ғына бикләп ҡуймаһаң). Хатта әллә ҡасан ҡылған ҡылыҡтарың өсөн дә бер килеп яуап бирергә тура килә. Башҡалар алдында булмаған сүрәттә лә үҙең алдында, үҙ выжданың ҡаршыһында.

Күренеүенсә, йыйынтыҡтағы хикәйә геройҙары, — башлыса, намыҫтары йоҡомһораған бәндәләр, әммә бөтөнләй намыҫһыҙ кешеләр түгел. Әйтәйек, "Хөкөм"дәге Сәмиғулла. "Кеше үлтермәнем, һатманым. Аллаға шөкөр, намыҫым таҙа", — тиһә лә,аҙаҡ аңлашылыуынса, бөтөнләй керһеҙ ҙә түгел икән шул. Хоҡуҡ факультетында уҡып йөрөүсе Илгиз уйынлыысынлы ойоштorған хөкөм барышында асыҡлана был. Сәми (ауылса әйткәндә) машиналар әҙ мәлдә колхоз шоферы булып эшләгән. Ҡартҡороһонан бала-сағаһына тиклем күрше ауылға ултыртып барғансы ла һығып аҡсаһын ала йөрөгән, ә етәкселәрҙең енәйәтен — күрмәмеш тә белмәмеш. Үҙен өндәшмәй ҡалыуҙа ғәйепләгәс, "Мин бәләкәй кеше", — ти

* Әмир Әминев. «Сөңгөл». «Китап». Өфө. 2001.

# ВОПРОСЫ КОНФЕРЕНЦИИ

**С какой целью дочь забирает отца в город?**

Что от односельчанина узнал старик Тимергали?

**Как Вы думаете, что олицетворял для старика дом в деревне?**

Как Вы думаете , почему эта находка так благотворно повлияла на настроение Тимергалея?

# Что ответил старик на реплики дочери?

# Какие отношения сложились с внуками?

# Какой инцидент произошел между внуком и дедом?

# Что больше всего обидело старика в этой ситуации?

**Как Вы думаете, правильно ли поступил старик приняв решение уйти из дома?**

Есть ли у Вас примеры из жизни , когда порядочные люди лишившись дома, работы, потеряли человеческий облик?

**Где нашел пристанище старик Тимергали?**

Какой эпизод из повести

Вам запомнился?

# Как бы Вы закончили повесть?

# Какова идея повести?

Спасибо за внимание